

БӨТӘ ДОНЪЯ ӨСӨН ХӘБӘР

# ЯЛҒАН ДИНДЕҢ АХЫРЫ ЯҠЫН!

- Ниндәй дин ялған?
- Ул нисек юҡ ителәсәк?
- Был һеҙгә нисек ҡағыла?

**Ниндәй дин ялған?** **Дин хаҡына башҡарылған енәйәт эштәре һеҙҙә асыу тыуҙырамы? Аллаһҡа хеҙмәт итәбеҙ тип раҫлаусы кешеләр ҡатнашҡан һуғыштарға һәм терактарға ҡаршы һеҙҙә ғәҙеллек хисе ҡуҙғаламы? Дин әһелдәренең һатлыҡ булыуы һеҙҙе борсоймо? Ни өсөн кешелектең күп проблемаларында нәҡ дин ғәйепле?**

**Был яуыз эштәр өсөн ғөмүмән дин түгел, ә *ялған* дин генә яуаплы. Бар халыҡтарҙа хөрмәт ителгән Ғайса пәйғәмбәр, ялған дин «насар ағас» кеүек «насар емеш бирә», тип әйткән (Маттай 7:15—17). Ялған дин ниндәй «емештәр» килтерә һуң?**



## Ялған дин...

■ **ҺУҒЫШТАРҘА ҺӘМ СӘЙӘСӘТТӘ ҠАТНАША.** «Азияла һәм башҡа илдәрҙә дини етәкселәр хакимиәт өсөн көрәшкәндә кешеләрҙең дини хистәрен оятһыҙ ҡуллана»,— тип әйтелә бер журналда. Һәм унда: «Был донъя әкрен генә аҡылдан яҙа»,— тигән һығымта яһала («Asiaweek»). Ҡушма Штаттарҙағы бер күренекле дини етәксе: «Террористар кешеләрҙе үлтермәһен өсөн, уларҙың үҙҙәрен үлтерергә кәрәк»,— тип әйткән. Нисек? «Аллаһ хаҡына уларҙың барыһын да шартлатығыҙ»,— тигән ул. Ә Инжилдә былай тиелә: «Әгәр берәү: „Мин Аллаһты яратам“,— тип әйтһә, ә үҙенең имандаш туғанына нәфрәтләнһә, ул — ялғансы» (1 Яхъя 4:20). Ғайса хатта: *«Дошмандарығыҙҙы яратығыҙ»*,— тигән (Маттай 5:44). Һуғыштарҙа ҡатнашмай торған диндәрҙе әйтеп бирә алаһығыҙмы?

■ **ЯЛҒАН ТӘҒЛИМӘТТӘР ТАРАТА.** Күпселек диндәр кешенең күҙгә күренмәй торған ниндәйҙер өлөшө — йәне йәки рухы бар һәм ул, кеше үлгәс, йәшәүен дауам итә тигән тәғлимәт тарата. Шуға күрә был диндәрҙә, үлгән кешенең рухы хаҡына доға уҡырға кәрәк тип, кешеләрҙән аҡса талап итәләр. Әммә был тәғлимәт Аллаһ Һүҙенә ҡаршы килә. *«Гонаһ ҡылыусы йән үләсәк»*,— тип әйтелә унда (Йәзәкил 18:4). «Тереләр үләсәктәрен беләләр, ә үлеләр бер ни ҙә белмәй» (Вәғәзсе 9:5). Ғайса, үлеләр терелтеләсәк, тип өйрәткән. Әгәр йән үлемһеҙ булһа, кешене терелтеү кәрәк булмаҫ ине (Яхъя 11:11—25). Һеҙ тотҡан дин, йән үлмәй, тип өйрәтәме?

■ **ӘХЛАҠҺЫҘЛЫҠҠА ЮЛ ҠУЯ.** Ҡайһы бер илдәрҙең сиркәүҙәрендә рухани итеп гомосексуалистарҙы һәм лесбиянкаларҙы ҡуялар һәм хөкүмәттәрҙе ундай кешеләрҙе никахлаштырырға өндәйҙәр. Хатта әхлаҡһыҙлыҡты хөкөм иткән сиркәүҙәрҙә лә балаларҙы енси аҙғынлыҡҡа тартҡан дини етәкселәрҙе түҙеп торалар. Ә Аллаһ Һүҙендә асыҡтан-асыҡ былай тип әйтелә: *«Алданмағыҙ: аҙғындар, ботҡа табыныусылар, зинасылар, енси боҙоклоҡҡа бирелгәндәр, бер-береһе менән енси мөнәсәбәткә кереүсе ирҙәр... Аллаһ Батшалығына эйә була алмаясаҡтар»* (1 Көринтлеләргә 6:9, 10). Енси аҙғынлыҡҡа юл ҡуйған диндәрҙе беләһегеҙме?

Насар емеш килтергән диндәрҙе нимә көтә? «Яҡшы емеш бирмәй торған һәр ағасты киҫеп, утҡа ташлайҙар»,— тип киҫәткән Ғайса (Маттай 7:19) . Эйе, ялған дин тамыры менән юҡ ителәсәк! Был нисек һәм ҡасан буласаҡ? Был һорауға яуап Инжилдә, Асылыш китабының 17-се һәм 18-се бүлектәрендәге пәйғәмбәрлектә бирелә.

## Ялған дин «ер батшаларына» тәьҫир итә

## Ялған дин нисек юҡ ителәсәк?

Инжилдә ете башлы һәм ун мөгөҙлө ҡыҙыл януар өҫтөндә ултырған бер фәхишә, йәғни уйнашсы ҡатын һүрәтләнә (Асылыш 17:1—4). Кем был фәхишә? Ул «ер батшаларына» тәьҫир итә. Ул ҡуйы ҡыҙыл кейемгә кейенгән, хушбуйҙар һөрткән һәм байлыҡҡа күмелгән. Өҫтәүенә уның сихырына «*бөтә халыҡтар* ҙа алданған» (Асылыш 17:18; 18:12, 13, 23). Изге Яҙмалар беҙгә был фәхишә ялған динден бөтә донъя империяһы икәнен аңларға ярҙам итә. Фәхишә — ул бер дин түгел, ә насар емеш килтергән барлыҡ диндәр.



Фәхишә ултырған януар — был донъяның сәйәси көстәре, йәғни хөкүмәттәре* (Асылыш 17:10—13). Ялған дин, был сәйәси януарҙың өҫтөнә атланып, уның ҡарарҙарына тәьҫир итергә һәм януар менән етәкселек итергә тырыша.

Әммә тиҙҙән иҫ киткес үҙгәрештәр булырға тора. Инжилдә былай тиелә: «Һин күргән ун мөгөҙ һәм януар фәхишәне нәфрәт итәсәк һәм уны бөлгөнлөккә төшөрәсәк, яланғас ҡалдырасаҡ, уның тәнен ашаясаҡ һәм уны утта яндырасаҡ» (Асылыш 17:16). Көтмәгәндә был донъяның сәйәси көстәре, рәхимһеҙлек менән ялған дингә ташланып, уны тулыһынса юҡ итәсәк! Быға уларҙы кем этәрәсәк? «*Аллаһ... Үҙенең* ихтыярын үтәргә уларҙың йөрәктәренә һаласаҡ»,— тип әйтелә Инжилдә (Асылыш 17:17). Был һүҙҙәрҙән күренеүенсә, Аллаһ ялған динде уның исеме хаҡына башҡарылған бөтә яуыз эштәре өсөн яуапҡа тарттырасаҡ. Камил ғәҙеллек күрһәтеп, ул, был фәхишәне юҡ итер өсөн, уның сәйәси һөйәркәләрен ҡулланасаҡ.

Ялған динде көткән язаға дусар булырға теләмәһәгеҙ, һеҙ нимә эшләргә тейеш? «Минең халҡым... унан сыҡ»,— тип саҡыра Аллаһтың хәбәрсеһе (Асылыш 18:4). Эйе, ялған диндән хәҙер ҡасырға кәрәк! Ләкин ҡайҙа ҡасырға? Атеист булырғамы? Юҡ, уларҙың да киләсәге өмөтһөҙ (2 Тессалуникәлеләргә 1:6—9). Ысын хәүефһеҙлекте хаҡ дин генә бирә ала. Әммә ниндәй дин хаҡ?

## «Минең халҡым... унан сыҡ»

* Бының тураһында күберәк белер өсөн, «Асылыш: уның бөйөк апогейы яҡын!» (рус) тигән китапты ҡарағыҙ. Йәһәвә Шаһиттары тарафынан баҫтырылған.



# Хаҡ динде нисек танырға

**Хаҡ дин ниндәй яҡшы емештәр бирергә тейеш? (Маттай 7:17).**

## Хаҡ диндә...

■ **ЯРАТЫУ КҮРҺӘТӘЛӘР.** Аллаһтың ысын хеҙмәтселәре «донъянан түгел». Улар раса һәм милләтенә ҡарап бер-береһен айырмай. Улар «бер-береһен ярата» (Яхъя 13:35; 17:16; Рәсүлләр 10:34, 35). Аллаһтың хеҙмәтселәре имандаштарын үлтермәү генә түгел, улар өсөн ғүмерҙәрен бирергә әҙер (1 Яхъя 3:16).

■ **АЛЛАҺТЫҢ ҺҮҘЕНӘ ЫШАНЫС КҮРҺӘТӘЛӘР.** Хаҡ дин «йолаларға» һәм «кеше уйлап сығарған ҡағиҙәләргә» өйрәтмәй, уларҙың бөтә тәғлимәттәре Аллаһтың Һүҙенә, Изге Яҙмаларға, нигеҙләнгән (Маттай 15:6—9). Ни өсөн? Сөнки «бөтә Яҙма Аллаһ тарафынан рухландырылған һәм өйрәтеү, шелтәләү, төҙәтеү... өсөн файҙалы» (2 Тимутегә 3:16).

■ **ҒАИЛӘЛӘРҘЕ НЫҒЫТАЛАР ҺӘМ ЮҒАРЫ ӘХЛАҠ НОРМАЛАРЫ БУЙЫНСА ЙӘШӘЙҘӘР.** Хаҡ дин ирҙәрҙе «тәндәрен нисек яратһалар, ҡатындарын да шулай яратырға» дәртләндерә, ҡатындарға «ирен хөрмәт итергә» өйрәнергә ярҙам итә, ә балаларҙа ата-әсәләргә тыңлаусанлыҡ тәрбиәләй (Эфеслеләргә 5:28, 33; 6:1). Унан тыш, хаҡ диндә яуаплы ҡәрҙәштәр әхлаҡ яғынан үҙҙәре үрнәк булып торорға тейеш (1 Тимутегә 3:1—10).

Ниндәй ҙә булһа дин был талаптарға яуап бирәме? «Бөтә кешеләр Йәһәвә Шаһиттары кеүек йәшәһәләр һәм улар вәғәзләгән хәбәргә ышанһалар, донъяла Холокост кеүек ваҡиғалар булмаҫ ине һәм кешелеккә бер ҡасан да геноцид ҡурҡынысы янамаҫ ине»,— тип әйтелә 2001 йылда сыҡҡан «Холокост политикаһы» китабында («Holocaust Politics»).



**Йәһәвә Шаһиттары Изге Яҙмаларҙағы принциптарҙы 235 илдә һәм территорияла вәғәзләү генә түгел, үҙҙәре лә шул принциптар буйынса йәшәйҙәр. Беҙ һеҙҙе Аллаһтың талаптары тураһында белер һәм уға ярарға өйрәнер өсөн Йәһәвә Шаһиттарына мөрәжәғәт итергә саҡырабыҙ. Хәҙер эш итергә ваҡыт. Һуҙырға ярамай. Тиҙҙән ялған дин юҡ ителәсәк! (Софония 2:2, 3).**